**Ата-әсәләргә кәңәштәр**

Баланың һорауҙарына тыныс һәм дөрөҫ яуап бирергә. Ашыҡһағыҙ, ваҡытығыҙ булмаһа ла ҡысҡыра башламағыҙ, уны ҡапыл бүлдермәгеҙ.

Баланың һорауҙарын етди ҡабул итегеҙ.

Баланың үҙе өсөн генә айырым бүлмә булырығыҙ.

Бала үҙенең эштәрен һәм ҡаҙаныштарын күрһәтә алған урын булһын.

Баланың өҫтәлендәге тәртипһеҙлек ижади эш менән бәйле булғанда әрләшмәгеҙ. Әммә эште тамамлағас урынын йыйыштырып ҡуйыуын талап итегеҙ.

Баланы ниндәйҙер уңыштары өсөн түгел, ә нисек бар шулай яратыуығыҙҙы күрһәтегеҙ.

Балаға ҡулынан килерҙәй эштәр ҡушығыҙ.

Балаға үҙ пландарын төҙөргә, ҡарарҙар ҡабул итергә ярҙам итегеҙ.

Эшенең һөҙөмтәләрен яҡшыртырға булышығыҙ.

Үҙегеҙ менән ҡыҙыҡлы урындарға сәйәхәткә алығыҙ.

Балағыҙҙың кәмселектәрен күрһәтеп башҡа балалар менән сағыштырмағыҙ.

Баланы кәмһетмәгеҙ.

Баланы үҙаллы фекер йөрөтөргә өйрәтегеҙ.

Баланы китаптар, уйынсыҡтар менән тәьмин итеп тороғоҙ.

Баланы төрлө ваҡиғалар уйлап сығарырға, фантазияларға өйрәтегеҙ. Быларҙы бергә башҡарығыҙ.

Баланы кесе йәштән китап уҡырға өйрәтегеҙ.

Уның ихтыяждарына иғтибарлы булығыҙ.